*Әлфир ҒАЙСИН,*
*Рәми Ғарипов исемендәге*
*1-се республика башҡорт*
*гимназия-интернаты директоры*



# Бейек осоштарға — ныҡлы ҡанаттар

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт гимназия-интернаты 2005 йылда 60 йыллыҡ оло юбилейын билдәләне. Нефтселәр мәҙәниәт һарайының залы туп-тулы булып, күп ”интернатский”ҙар (үҙемә был мәктәптә уҡыу бәхете теймәһә лә, мәктәп-интернатты тамамлаусылар өсөн был һүҙҙең яҡын һәм ҡәҙерле икәнен беләм) инә алмайынса фойела тороп ҡалһалар ҙа, һәр береһе шат, кәйефтәре күтәренке ине. Һәр ҡайҙа ҡосаҡлашып, илашып, ҡыуанышып, көлөшөп торған төркөмдәргә ҡарап, мәктәптең тылсымлы көсөнә аптырап та, һоҡланып та ҡуяһың. Замананың ауыр йылдарында йәтимлек, аслыҡ төшөнсәләрен үҙ иңдәрендә татыған балаларҙы бер ғаилә итеп берләштергән, шул ауырлыҡтарҙы ҡулға-ҡул тотоношоп үтеп сығып, хәҙер инде Башҡортостандың төрлө тарафтарында, төрлө өлкәлә үҙҙәрен абруйлы, үҙ эшенең оҫтаһы итеп күрһәткән милли кадрҙарҙы тәрбиәләгән мәктәп менән үҙ яҙмышын бәйләгәндәр хаҡлы ғорурлана.

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт гимназия-интернаты тип йөрөтөлгән уҡыу йортоноң тарихы түбәндәгесә. Башҡорт балаларына дөйөм белем биреүсе махсус мәктәп Өфөлә 1937 йылда асыла. Мәктәптең башланғыс кластары Зенцов урамындағы 49-сы һанлы ике ҡатлы йортҡа урынлаштырыла. 1944 йылдың 25 мартында РСФСР Халыҡ комиссарҙары Советының 291-се ҡарары нигеҙендә 9-сы башҡорт мәктәбе янында башҡорт балалары өсөн ”Лесопильная” урамында интернат төҙөлә. Ул дәүләт тарафынан тәьмин ителгән 200 бала өсөн пансион була. Мәктәптә тәүге йылдарҙа Өфө балалары ғына уҡыһа, һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың төрлө райондары-



*Яңы мәктәп бинаһын асыу*

нан аталары фронтта һәләк булған балалар килә башлай, һуғыш осороноң бөтә ауырлығын үҙ иңдәрендә татыған, күптәре һуғыш арҡаһында уҡыуын ташларға мәжбүр булған балалар була. Уларға уҡыу талаптарын төшөндөрөү, интернат шарттарына өйрәтеү уҡытыусыларҙан, тәрбиәселәрҙән ҙур көс һәм түҙемлек талап итә. 1944—1945 уҡыу йылында — тәүге, 1946—1947 уҡыу йылында икенсе сығарылыш була. 1949 йылда мәктәп Красин урамындағы 33-сө йортҡа күсә. 1956 йылдың 26 июлендә РСФСР Министрҙар Советы "1956 йылда мәктәп-интернаттар ойоштороу тураһында" тигән ҡарар ҡабул итә. Ошо ҡарарға таянып, КПСС-тың өлкә комитеты һәм Министрҙар Советы республикала мәктәп-интернаттар ойоштороу тураһында ҡарар сығара. Уның 1-се пунктында, Өфө ҡалаһында 9-сы мәктәп һәм интернат нигеҙендә 215 балаға иҫәпләнгән мәктәп-интернат төҙөргә, тиелә. БАССР мәғариф министрының 1956 йылдың 15 авгусындағы бойороғонда 9-сы урта мәктәп һәм уның интернаты нигеҙендә төҙөлгән мәктәпте "Өфөнөң 1-се һанлы мәктәп-интернаты" тип атарға, тиелә. 1960 йылда 1-се республика мәктәп-интернаты Рәсәй урамындағы махсус төҙөлгән бинаға күсә.

1991 йылдың йәйендә БАССР Министрҙар Советы һәм Халыҡ мәғарифы министрлығы коллегияһы ҡарары нигеҙендә 1-се һанлы республика мәктәп-интернаты 1-се республика башҡорт гимназия-интернаты тип үҙгәртелә. 1994 йылдан гимназия-интернат үҙенең күренекле уҡыусыһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов исемен йөрөтә.

Данлыҡлы уҡыу йортоноң 60 йыллыҡ оло шатлығын уртаҡлашып, әһәмиәтен юғары баһалап, 2004 йылдың 19 майында Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ.Рәхимов, Премьер-министр Р.И.Байдәүләтов, "Башинформсвязь" асыҡ акционерҙар йәмғиәте генераль директоры С.М.Ғайсин гимназия өсөн өр-яңы бинаға нигеҙ ташы һалды, һәм бер йыл эсендә мөһабәт белем һарайы ҡалҡып сыҡты. Унда заманса йыһазландырылған 45 класс бүлмәһе, 4 компьютер класы, ике спорт залы, уҡыу залы булған китапхана, медиатека, 380 урынлыҡ тамаша залы, хореография һәм конференция залдары, оҫталар бүлмәһе, кулинария, тегеү-бәйләү кабинеттары, ашхана һәм радио селтәре бар. Хөкүмәтебеҙҙең, Мәғариф министрлығының беҙгә ышаныс менән ҡарауы

гимназия етәкселеге, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр коллективы алдына ҙур талаптар, бурыстар ҡуя.

Педагогик коллектив, буласаҡ милли кадрҙарға белем һәм тәрбиә биреү буйынса ҡуйылған дөйөм маҡсаттарҙан сығып, гимназия-интернат шарттарында уҡыусыларҙы шәхес итеп тәрбиәләү, уҡытыу һәм үҫтереү юлдары проблемаһы өҫтөндә эшләй. Милләтебеҙҙең талантлы балаларын тәрбиәләү һәм уҡытыу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған.

Гимназияла 66 уҡытыусы һәм 38 тәрбиәсе эшләй. Улар араһында бер Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, һигеҙ Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, өс Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, ете Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, ун алты Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, өс Сорос премияһы лауреаты бар.

Белем биреүҙе модернизациялау шарттарында методик хеҙмәттең бөтә нигеҙе педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең эш практикаһына педагогика, психология фәндәренең яңы асыштарын индереүгә йүнәлтелгән. Фәнни-теоретик, практик конференциялар һәм педсоветтар, семинар-практикумдар, методик оперативкалар, конкурстар уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең ижади эшмәкәрлегенең иң эффектлы формалары булып тора.

Гимназия-интернат инде күп йылдар Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты менән хеҙмәттәшлек итә. Һуңғы йылдарҙа гимназияла педагогия, филология фәндәре докторҙары, профессорҙар С.Ә.Галин, Н.М.Мочалова, К.З.Зәкирйәнов, М.Ғайсина, А.А.Фәтихова, психология фәндәре докторы, профессор В.Ф.Сафин, педагогия фәндәре кандидаттары Б.Х.Юнысбаев, Т.Н.Дорожкина, Ф.Р.Фәхретдинова, шулай уҡ Т.Ю.Квасникова, доцент М.Ә.Абдуллина, Н.А.Ҡыяметдинова, Х.Ә.Ҡотоева белем биреүҙең иң актуаль проблемалары буйынса лекциялар менән сығыш яһаны, семинар-кәңәшмәләр ойошторҙо.

Әйтәйек, 2005—2006 уҡыу йылында мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыу уңайынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика семинар-кәңәшмәһе үтте, шулай уҡ доцент М.Ә.Абдуллина, Т.Ю.Квасникова, Н.А.Ҡыяметдинова, Х.Ә.Ҡотоева ”Мәғарифта модернизациялау шарттарында белем биреү учреждениеларында инновацион эшмәкәрлекте модернизациялау” тигән лекциялар менән сығыш яһаны. Был сараларҙа һәләтле балаларҙы артабан үҫтереү проблемаһы буйынса ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар, экстремаль шарттарҙа балаларға психологик ярҙам күрһәтеү, белем сифатының мониторингы һәм диагностикаһы, уҡыу процесына яңы технологиялар индереү буйынса кәңәштәр бирелә.

Гимназияла ижади шәхесте формалаштырыуҙа, уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороуҙа яңы ҡараштарҙы индереү, уҡытыусының, тәрбиәсенең хеҙмәт функцияларын яңыртыуҙы тәьмин итергә тейешле йөкмәтке, формалар һәм алымдар ҡулланыу талаптары ҡуйылған. Был проблеманың билдәләнеүе осраҡлы түгел. Гимназияла республикабыҙҙың район һәм ҡалаларынан йыйылған уҡыусылар, шул иҫәптән Ҡурған, Ырымбур, Төмән, Пермь, Силәбе, Һамар, Һарытау өлкәләренән килгән балалар уҡый.

Һәләтле, тырыш балаларҙы үҙе өлгө булырҙай, уңған, ижади һәләтле уҡытыусы күрә һәм үҫтерә ала. Элек-электән мәктәп үҙ эшенең оҫтаһы

булған педагогтары менән ғорурлана. Әле лә гимназия-интернатта педколлективтың эше яйға һалынған. Оҙаҡ йылдар эшләгән Башҡортостан Республикаһының алдынғы физкультура һәм спорт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, еңел атлетика буйынса халыҡ-ара категориялы тренер Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәйҙең Мәғариф алдынғыһы Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы Бәхтейәрова һәм Зәкинә Ислам ҡыҙы Хисамова, директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Әлмира Миңлебай ҡыҙы Абдуллина кеүек тәжрибәле педагогтарыбыҙ менән бер рәттән бик күп өмөтлө йәштәребеҙ белем биреүгә ваҡыттарын һәм көстәрен йәлләмәй, район, ҡала күләмендә үткәрелгән олимпиадаларҙа бөтә предметтарҙан да тиерлек призлы урындарҙы яуланыҡ, республика күләмендә лә һынатманыҡ. Шулай уҡ 2004—2005 уҡыу йылында 10 уҡыусыбыҙ ҡала һәм республика күләмендә үткәрелгән Бәләкәй фәндәр академияһы фәнни-практик конференцияһында призлы урындар яулап, диплом һәм грамоталар менән бүләкләнһә, 2005—2006 уҡыу йылында ла район, ҡала һәм республика күләмендә 11 уҡыусыбыҙ диплом һәм грамоталарға лайыҡ булды, 2 уҡыусыбыҙ Ярославль ҡалаһында үткәрелгән ”Асыш” тип аталған халыҡ-ара фәнни-практик конференцияла ҡатнашыу бәхетенә ireште. Уларҙың береһе — сертификат, икенсеһе IV урын яулап, диплом алып ҡайтты.

Уҡытыу-тәрбиә эшен комплекслы алып барғанда ғына төрлө яҡлап үҫешкән шәхесте тәрбиәләп була. Уҡыусыларға өҫтәлмә белем биреү — халыҡ мәғарифы системаһында баланың рухи, интеллектуаль һәм физик мөмкинлектәрен, аҡыл һәм ижади һәләттәрен үҫтереү йүнәлешендәге эштең айырылғыһыҙ бер өлөшө. Был йәһәттән гимназия-интернатта бөтәһе 18 түңәрәк һәм 6 спорт секцияһы эшләй. ”Иң яҡшы тренер” исеменә лайыҡ Александр Павлович Мельников етәкселегендәге шашка түңәрәге (уның уҡыусылары Айнур Шәйбәков һәм Олеся Абдуллина Рәсәйҙә генә түгел, Европа күләмендә үҙҙәрен танытып өлгөрҙөләр), Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әнүәр Хәким



улы Шафиҡов етәкләгән ”Аҡйондоҙ” бейеү ансамбле гимназиябыҙ ғорурлығы. Быйыл Күгәрсен, Йылайыр, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлебаш, Хәйбулла райондарында балалар көсө менән ҙур концерт күрһәтеп ҡайттыҡ.

Уҡыусыларҙың етәкселек итеү, аудитория менән эш итергә өйрәнеү кеүек сифаттарын үҫтереү маҡсатында ”Лидер” балалар ойошмаһы эшләй. Ойошманың Президенты һайланған һәм уның ҡул аҫтында бер нисә өлкәгә яуап биргән министрҙар бар. Был ойошма ағзалары хәҙерҙән үк идара итергә өйрәнәләр һәм үҙҙәрендә яуаплылыҡ, үҙаллылыҡ кеүек һыҙаттарҙы булдыралар.

Тәрбиәүи эш гимназия-интернаттың уҡытыу программаһын тулыландырып, алға ҡуйылған төп мәсьәлә — халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, мәҙәниәтен һаҡлауға булышлыҡ итә, уҡыусыларҙың эске культураһын, рухын үҫтерергә ярҙам итә.

1977 йылда Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Муса Мортазин исемендәге премия лауреаты, Өфө ҡалаһының Маҡтаулы гражданы Зөмәрә Вәли ҡыҙы Хисмәтуллина ойошторған этнографик музей ҙа оло ғорурлығыбыҙ. Үҙенең һоҡланыуын белдереп, Мостай Кәрим: ”Музейҙы ҡарап сығыу һәм ундағы күргәндәр мине бик тетрәндерҙе. Уны ойоштороусыларға һәм музейҙы ойоштороуға ҙур көс һалыусыларға рәхмәтемде белдерәм. Был — милли мәҙәниәтебеҙ сығанаҡтарына һөйөү тойғоларының сағыу балҡышы”, — тип яҙһа, Президентыбыҙ шулай уҡ юғары баһа бирҙе: ”Башҡортостан халыҡтарының тарихын һәм мәҙәниәтен һаҡлауығыҙға һәм өйрәнеүегеҙгә ҙур рәхмәт!” — тип махсус кенәгәгә яҙып ҡалдырҙы ул.

Быйылғы йылда шулай уҡ мәҙәниәт, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарын, Мостай Кәрим менән Рәми Ғариповтың тормошона һәм ижадына бағышланған кабинет-музейҙарҙы йыһазланыҡ.

Балаларҙың һаулығына ла күп иғтибар бүленә. Республикабыҙҙа беренселәрҙән булып гимназиябыҙҙа 1993 йылдың мартында һауыҡтырыу үҙәге асылды. Был үҙәктең үҙенсәлеге шунда — Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә лә тәүгеләрҙән булып интернат тибындағы белем биреү учреждениеларында балаларҙың ауырыуҙарын булдырмауға йүнәлтелгән медицина хеҙмәтләндереүе ойошторолоуҙа. Һауыҡтырыу үҙәгенең эше тәбиғи рәүештә белем һәм тәрбиә биреү ағышына ҡушылып китеп, уҡыусыларға төрлө тармаҡтарҙы берләштергән медицина хеҙмәте күрһәтеүҙән тора. Унда заманса һауыҡтырыу технологиялары индерелгән, һәм һәр бала уҡыу йылы барышында ике аҙналыҡ һауыҡтырыу курстары үтә. Унда массаж, күҙҙәр өсөн күнегеүҙәр, физик терапия, витаминдар, үлән төнәтмәләре эсереү, милли эсемлектәрҙе (ҡымыҙ, буҙа) ҡулланып, кәрәкле һәм файҙалы туҡланыу, яҙ һәм көҙ миҙгелдәрендә таралыусан ауырыуҙарға ҡаршы базис һауыҡтырыу һәм санитар-гигиена саралары үткәреү (поливитаминдар, үҫемлек фитонцидтары, профилактика) ҡаралған.

Гимназияла әлеге ваҡытта бөтәһе 33 синыфта 777 бала белем ала. 10—11 синыфтар 4 профиль буйынса бүленеп, буласаҡ һөнәрҙәрен һайларға әҙерләнәләр. Улар: физика-математика, социаль-гуманитар, химия-биология, филология профилдәре. Һәр баланың һәләтен үҫтереү, белемгә ылыҡтырыу, маҡсатлы эшләргә өйрәтеү, фекерләү ҡеүәһен арттырыу беҙҙең

төп бурысыбыҙ булып тора. Ошо юҫыкта 2002 йылдың 26 сентябрендә Мәғариф министрлығы раҫлаған 418-се һанлы лицензия нигеҙендә эшләүсе ”Абитуриент мәктәбе”нең роле ҙур. Сығарылыш уҡыусыларын юғары уҡыу йорттарына әҙерләү маҡсатында гимназияла көндөҙ икенсе яртыһында 3 юғары уҡыу йорттарынан 17 уҡытыусы эшләй. Улар: профессор М.Ғ.Усманова, фән кандидаттары Х.Ф.Сәғетдинова, З.И.Федорова, А.В.Мухин, Г.Н.Гәрәева, С.Х.Нафиҡова, Һ.С.Хәйретдинов, В.А.Ғәббәсова, шулай уҡ йәш уҡытыусылар С.Ю.Байрамғолов, И.Д.Латипов, М.М.Әминев белем кимәлен үҫтереү эшендә ҙур ҡаҙаныштарға ирешә.

2003—2004 уҡыу йылында гимназияны 50 уҡыусы миҙалға бөтһә, 2004—2005 уҡыу йылын 42 бала алтын һәм көмөш миҙалға тамамланы. Эшләгән эшеңдең һөҙөмтәһен күреү бик ҡыуаныслы, әлбиттә. 2005 йылда сығарылыш уҡыусыларыбыҙҙың 97 проценты юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүҙәре лә тағы ла дәртләнеп эшләргә көс бирә. 2004—2005 уҡыу йылында уларҙың 46 проценты — техник вуздарға, 18 проценты — гуманитар факультеттарға, 17 проценты — медицина, химия, биология менән бәйле уҡыу йорттарына, 16 проценты юридик факультетҡа, шул иҫәптән 26 уҡыусы Рәсәйҙең башҡа ҡалаларына уҡырға инде. Мәҫәлән, хәҙерге көндә Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты, ”Интернатым — пар ҡанатым” гимназия гәзите мөхәррире, үткер ҡәләмле элекке уҡыусыбыҙ Ғәббәс Дәүләтшин — Санкт-Петербург кино һәм телевидение дәүләт университетында, ”Серле йондоҙҙар” һәм башҡа күп төрлө конкурстарҙа еңеүсе моңло һандуғасыбыҙ Редик Ефремов ГИТИС-та белем ала. Ошо һәм башҡа өс йыллыҡ эштәребеҙҙе байҡап сығып, йомғаҡ яһағандан һуң, быйыл ата-әсәләр, сығарылыш уҡыусылары, гимназистар, педагогик коллектив ризалыҡтары менән Президент В.Путин премияһына дәғүә итеп, Рәсәй Мәғариф министрлығы ойошторған ”Иң яҡшы мәктәп” конкурсында ла ҡатнашып ҡарарға булдыҡ. Был конкурста ла еңеп сығырбыҙ тигән ышаныс менән дәртләнеп эшләйбеҙ.

Киләсәктә республикабыҙ данын тағы ла күтәрерлек, уның етәкселәре булырлыҡ, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын, мәҙәниәтен хөрмәт иткән, киләсәген ҡайғыртҡан, телде яҡшы белгән белемле һәм әҙәпле шәхес тәрбиәләү — төп бурысыбыҙ. Ә быныҡ өсөн бөтә шарттар булдырылған һәм булдырыла. Әлеге ваҡытта гимназия территорияһында ҡыҙыу темп менән төҙөлөш эштәре бара. Беҙҙең гимназия Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыуға арналған сараларҙың федераль планына инде, шуның нигеҙендә төҙөлөш эштәре 4 этапҡа бүленде:

1. Яңы төҙөлгән мәктәп бинаһы;
2. Иҫке мәктәп бинаһын реконструкциялап, балалар һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн дөйөм ятаҡ төҙөү;
3. Ике дөйөм ятаҡты реконструкциялау;
4. Физик һауыҡтырыу комплексын төҙөү.

Традицияларға, исеменә тап төшөрмәй, заман менән бергә атларға бөтә шарттар тыуҙырып, киләсәктә лә яңы уңыштарға ирешербеҙ, тип уйлайым.